## Мәрхәмәтле, Рәхимле Аллаһ исеме менән!

## Нимә ул ураҙа?

Ураҙаның тел яғынан мәғәнәһе - тыйылыу, ә Шәриғәттә иһә - Аллаһ ризалығы өсөн таң атҡандан (иртәнге намаҙҙан) алып ҡояш байығанға тиклем ашау-эсеүҙән һәм ураҙаны боҙоусы башҡа ғәмәлдәрҙән тыйылып тороу.

## Ураҙаның ике терәге (әркәне) бар:

ниәт ҡылыу һәм ураҙаны боҙоусы нәмәләрҙән тыйылып тороу.

## Ниәттең төрҙәре

1. Фарыз ураҙаның (Рамаҙан айындағы) ниәте: кистән үк йәки иртәнге намаҙға ҡәҙәр күңелдән (ҡәлеб менән): "Ураҙа тотам", - тип ниәтләп ҡуйыу. Бынан тыш, Рамаҙан айы етеү менән: "Ай буйы ураҙа тотасаҡмын", - тип ниәтләп ҡуйыу ҙа рөхсәт ителә.
2. Нәфел ураҙаның ниәте: ураҙаны боҙа торған ғәмәлдәр (ашау-эсеү, яҡынлык ҡылыу) эшләнмәгән булһа, ниәте көндөң теләһә-ҡайһы ваҡытында ла ҡылыу ярай, әммә ураҙаның әжере ниәт ҡылған ваҡыттан башлана.

## Ураҙаның төрҙәре

1. Фарыз ураҙаһы (Рамаҙан айындағы ураҙа, нәҙер итеп әйтелгән ураҙа, кәффәрәт ураҙаһы).
2. Нәфел ураҙаһы (миҫал өсөн: һәр аҙнаның дүшәмбе һәм кесаҙна көнөндә тотола торған ураҙа, һижри календарь буйынса һәр айҙың 13, 14, 15-се көндәрендә тотола торған ураҙа, ғәшүрә көнөндә тота торған ураҙа һ.б).

## Рамаҙан айында ураҙа тотоуҙың шарттары:

мосолман булыу;
кешенең үҙ аҡылында булыуы;
бәлиғ йәшкә етеү;
йәшәй торған ереңдә булыу (мосафир кешегә ураҙа тотмаҫҡа рөхсәт ителә, әммә ауырлыҡ тыумаһа, мөбәрәк айҙың фазиләтен (дәрәжәһен) юғалтмаҫ өсөн сәфәрҙә булғанда ураҙа тотоу хәйерлерәк);
ураҙа тотоусы кеше сәләмәт, ә ҡатын-ҡыҙҙар иһә хәид һәм нифас ҡанынан таҙа булырға тейештәр. (Хәид - күрем (менструация) тигәнде аңлата, нифас - баланан бушанғандан һуң ҡан килеүе.



## Ураҙа ваҡытында ауырыу

Ауырыу ике төргә бүленә:
1. Дауалап булмай торған ауырыуҙар (быға өлкән йәштәгеләр, ураҙа тота алмаған кешеләр инә). Быңдай төр кешеләргә ураҙа тотоу фарыз түгел, әммә улар ҡалған көндәре өсөн мохтаж кешеләрҙе ашатырға бурыслы. Бер көнгә бер кеше. Йә иһә ҡалдырған көндәре иҫәбенсә, бер юлы шул көндәре күләмендә мохтаждарҙы йыйып ашата йәки тик бер мохтажға ғына ризыҡ менән бирә ала. Бер көн өсөн мохтаж кешегә 0.5 кг аҙык-түлек тейешле, мәҫәлән, ҡара бойҙай, дөгө, макарон, һ.б.
2. Ваҡытлыса ауырыу (һалҡын тейеп, эс ауыртыу һ.б) һәм ураҙа тотоу ауыр булһа (быға шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәид һәм нифас, бала имеҙеү ваҡыты, сәфәр ҙә керә), ҡалған көндәр өсөн ҡаза ҡылынырға тейеш (йәғни ҡалған көндәрҙең ураҙаһын тотоу тейешле).

## Ай башланыуын нисек беләбеҙ?

Рамаҙан айы етеүен ай күренеү йәки Шәғбән айының 30 көнгә тулыуы менән белеп була.

## Ураҙаны боҙоусы ғәмәлдәр (белмәйенсә йәки онотоп эшләүселәр ғөҙөрлө (азат) була)

1. Белә тороп ашау һәм эсеү. Кем онотоп, яңылыш эсһә-ашаһа – уның ураҙаһы дөрөҫ һәм ураҙаны дауам итергә кәрәк.
2. Енси яҡынлыҡ ҡылыу. Әгәр көндөҙ эшләнелһә һәм уға ураҙа тотоу фарыз булған осраҡта, ул кәффәрәт (искупление) ҡылырға тейеш. Әгәр мөмкин булһа, бер ҡолды азат итергә, уны булдыра алмаһа, өҙлөкһөҙ ике ай (60 көн) ураҙа тоторға, әгәр уны ла үтәй алмаһа, 60 меҫкенде ашатырға тейеш.
2. Ирҙе (ҡатынды) үпкәндә, ҡосаҡлағанда мәни сығыу.
3. Туҡландыра торған уколдар яһау (глюкоза), системалар ҡуйыу (витаминдар). Ләкин ҡалған уколдар ураҙаны боҙмай (туҡландырмай торған), мәсәлән, ауыртыуҙы баҫа торған.
4. Күп күләмдә ҡан сығыу. Мәҫәлән, хиджама яһатып сығарһа, тик әҙ генә күләмдә ҡан сығыу йәки анализ яһау өсөн алһалар, был ваҡытта боҙолмай.
5. Үҙ ихтыярың менән көсләп ҡоҫоу. Ауырыу сәбәпле сыҡһа - боҙолмай.
6. Хәид һәм нифас ҡандары килеү.



## Ураҙаның сөннәттәре

1. Сәхәр ашау.
2. Сәхәрҙе һуңлатып ашау.
3. Ифтарҙы һуңға ҡалдырмау.
4. Хөрмә менән ифтар ҡылыу (ауыҙ асыу), хөрмә булмаһа, һыу менән, бер нәмә лә тапмаһа (юлда булыу йәки башҡа сәбәптәр арҡаһында), ифтар ҡылыуҙы күңел (ҡәлеб) менән ниәтләү.
5. Ауыҙ асҡанда уҡый торған доғаны әйтеү, һәм, ғөмүмән, ураҙа тотҡан ваҡытта күберәк доға ҡылыу.
6. Күберәк саҙаҡа биреү.
7. Төнгө намаҙҙарҙы күберәк уҡырға тырышыу.
8. Ҡөръән уҡыу.
9. Ғөмрә ҡылыу.
10.Һукһәләр, асыуланһалар, бәхәскә кермәҫкә һәм: "Мин ураҙала", - тип әйтеү.
11. Ҡәҙер төнөн ғибәҙәттә үткәреү.
12. Рамаҙан айының һуңғы 10 көнөндә мәсеттә иғтикәфтә үткәреү.

## Мәкрүһ ғәмәлдәр

1. Ауыҙға һәм танауға һыу алғанда, эскә ебәреү.
2. Кәрәкмәгәндә ризыҡ ҡабып ҡарау.

## Мөбәх (рөхсәт ителгән) ғәмәлдәр

1. Төкөрөктө йотоу.
2. Хәжәт булыу сәбәпле, ризыҡты ҡабып ҡарау (тәмен белеү өсөн).
3. Йыуыныу, ғөсөл алыу.
4. Мисүәк ҡулланыу.
5. Миск, еҫле майҙар һөртөү.

## Тыйылған ғәмәлдәр

1. Ҡаҡырыҡты йотоу.
2. Үҙ теләген тотоп тора алыуына ышанмаһа, үбешеү.
3. Боҙоҡ-насар, һүгенеү һүҙҙәре һәм гонаһлы ғәмәлдәр.
4. Тупаҫлыҡ.
5. Өҙлөкһөҙ бер-нисә көн ифтар ҡылмайынса, ураҙа тотоу.

## Нәфел ураҙалар

1. Шәүүәл айында 6 көн ураҙа тотоу. Был ураҙаны Рамаҙан айындағы ураҙаһын тулыһынса тотоп бөткән, ҡалдырған көндәрен ҡаза ҡылған кеше генә тота ала.
2. Ғәрәфә көнөндә ураҙа тотоу (хажда булмағандар өсөн).
3. Ғәшүрә көнөндә ураҙа тотоу. 9-сы йәки 11-се көн менән бергә (Ғәшүрә - Мөхәррәм айының 10-сы көнө).
4. Дүшәмбе һәм кесаҙна көндәрендә ураҙа тотоу.
5. Һәр айҙа өс көн ураҙа тотоу, әммә тулы ай көндәрендә, йәғни ураҙаны хижри календарь буйынса 13, 14, 15-се көндәрҙә тотоу хәйерлерәк.
6. Көн аша ураҙа тотоу (Дауыт пәйғәмбәр ураҙаһы): бер көн ураҙа тотаһың, бер көн ифтар ҡылаһың.
7. Мөхәррәм айында мөмкин тиклем күберәк ураҙа тотоу.
8. Зөлхизә айының беренсе 9 көнөндә ураҙа тотоу.
9. Шәғбән айында күберәк ураҙа тотоу.

## Ураҙа тоторға мәкрүһ булған көндәр

Йома, шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә айырым ғына ураҙа тотоу мәкрүһ (хупланмай) һынала, ләкин берәй сәбәп тура килһә, мәҫәлән, Ғәрәфә көнөнә, был вакытта рөхсәт ителә.

## Ураҙа тоторға ярамаған көндәр

1. Рәжәб айын, башҡа айҙарҙан айырып алып, ураҙа тотоу.
2. Шикле көндәр (Рамаҙан айы инергә бер-ике көн ҡалғас). Әммә был көндәр кешенең ғәҙәте буйынса ураҙа тота торған көндәренә тура килһә, рөхсәт ителә.
3. Ике ғәйет көнөндә ураҙа тотоу.
4. Тәшриҡ көндәрендә, ләкин ҡорбан салырға (хажиларға ҡағыла) мөмкинлеге булмау сәбәпле ураҙа тотһа, рөхсәт ителә.
5. Йыл дауамында бер туҡтауһыҙ ураҙа тотоу.

Ҡаза ҡылғанда бер-бер артлы тотоу мөстәхәб булып тора, һәм ғәйеттән һуң ҡаза ҡылырға ашығыу хәйерле. Әгәр ҙә Рамаҙан айында тотолмаған көндәр ҡалһа, икенсе Рамаҙанға тиклем ҡалдырырға ярамай. Әгәр ғөзөрһөҙ  ҡалдырһа, кеше гонаһлы була һәм, барыбер, ҡалған көндәренең ҡазаһы уның өҫтөндә бурыс булып ҡала һәм был ураҙаларҙы ул тоторға тейеш.



## Фытыр саҙаҡаһы

Мосолман кешеһе Рамаҙан ғәйете кисәһенә ирешә икән, ул бер сағ күләмендә ризыҡ, фытыр саҙаҡаһы бирергә тейеш. Үҙенән һәм ғаилә ағзалары исеменән, ҡарындағы балаһы өсөн дә бирһә, хәйерле булыр.

## Фытыр саҙаҡаһының хикмәте

1. Ураҙаһын төрлө кәмселектәрҙән таҙартыу. Сөнки ураҙа тотҡанда төрлө хаталар китергә мөмкин: насар, боҙоҡ һүҙҙәр һөйләү һәм башҡа гонаһлы ғәмәлдәр.
2. Был көндө шатланһын, һоранып йөрөмәһен тигән ниәт менән, мохтаждарҙы һөйөндөрөү.

## Саҙаканы биреү ваҡыты

1. Ғәйеткә 1 йәки 2 көн ҡалғас, фытыр саҙаҡаһын бирергә рөхсәт ителә.
2. Иң хәйерле ваҡыты - ғәйет намаҙы уҡыр алдынан.
3. Ғәйет намаҙынан һуң бирелмәй, сөнки ваҡыты сыҡҡан була.

## Күләме

Фытыр саҙаҡаһы, яҡынса, 3 кг ризыҡтан бирелә. Был төрлө ярма, туҡмас, хөрмә һ.б аҙык-түлек булырға мөмкин.

## Ғәйет намаҙы

Ғәйет намаҙы һәр мосолман өсөн вәджиб. Ҡояш сығып, офоҡтан һөңгө бейеклеге ҡәҙәр күтәрелгән ваҡыттан алып өйләгә тиклем уҡыла. Ваҡыты сыҡһа, ҡаза ҡылынмай. Ҡала ситендә, яланда уҡыу сөннәт булып һынала, мәсеттә лә уҡыу рөхсәт ителә. Ғәйеткә тиклем таҡ һанда хөрмә ашап һәм ғөсөл ҡойоноп, иң яҡшы кейем кейеп, еҫле майҙар һөртөп барыу, бер юлдан барып икенсе юлдан ҡайтыу сөннәт булып тора. **Ғәйет менән ҡотлау һүҙҙәре: ТәҡаббӘллаһу миннәә үә миңкүм (Аллаһ һеҙҙән дә, беҙҙән дә ҡабул итһен).** Ғәйет кисенән алып ғәйет көнөндә ҡояш байығансы, намаҙҙарҙан һуң тәкбир әйтеү сөннәт. **Унын һүҙҙәре: Аллааһү әкбәр, Аллааһү әкбәр, ләә иләәһә иллӘллааһ, үӘллааһү әкбәр, Аллааһү әкбәр үәлиЛләәһил хәмде.**
Ғәйет намаҙы 2 рәкәғәт итеп хөтбәгә хәтле уҡыла. Беренсе рәкәғәттә тәкбиратүл ихрамдан һуң (иң беренсе әйтелә торған тәкбир) тағын 6 тапҡыр тәкбир әйтелә, икенсе рәкәғәттә, уҡый башлағансы, биш тәкбир әйтелә.



فقه الصيام با للغة البشقوردية

# Ураҙаға  бәйле аңлатмалар һәм хөкөмдәр



الشيخ هيثم سرحان حفظه الله

www.alsarhaan.com